РЕСПУБЛИКАНСКАЯ ОЛИМПИАДА ШКОЛЬНИКОВ НА КУБОК имени Ю.А. ГАГАРИНА

2019-2020 учебный год

# БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК

МУНИЦИПАЛЬНЫЙ ЭТАП

7 класс

*Максимальное количество баллов за задания:*

| Задания | 1 | 2 | 3 | 4 | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 | 10 | 11 | 12 | Сумма |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| Количество баллов | 5 | 5 | 10 | 4 | 8 | 4 | 1 | 5 | 1 | 1 | 8 | 10 | 62 |

***Все оценки должны быть целыми числами, дробные оценки не допускаются!***

## ОТВЕТЫ И РЕКОМЕНДАЦИИ ДЛЯ ПРОВЕРКИ

| *Һораузың тәртибе* | *Аңлатма* | *Иң юғары иҫәп (бал)* |
|---|---|---|
| **1-се һорау** | Һәр дөрөҫ мәҡәлгә берәр бал<br>1) **Ат юлда һынала, ир яуҙа һынала.**<br>2) **Батыр яуҙа беленер, сәсән дауҙа беленер.**<br>3) **Оҫта барҙа ҡулың тый, сәсән барҙа телең тый.**<br>4) **Алда булһа ҙур теләк, эштән ял таба йөрәк.**<br>5) **Ҡош – һауала, ат-тауҙа, егет яуҙа һынала.** | **5 бал** |
| **2-се һорау** | Дөрөҫ фразеологизмдарға берәр бал<br>1) **Баш ҡатыу – аптырау**<br>2) **Бил бөгөү – эшләү**<br>3) **Бот күтәреп ятыу – ялҡауланыу**<br>4) **Борсаҡ бешмәү – татыуһыҙлыҡ**<br>5) **Бәйҙән ысҡыныу – иреккә сығыу** | **5 бал** |
| **3-сө һорау** | Һөйләм дөрөҫ яҙылһа – 10 бал, 1-2 хата – 8 бал, 3-4 хата – 6 бал, 5-6 хата – 4 бал<br>**Быйыл яҙ иртә килде. Һуңғы ике көн эсендә тау һыртындағы ҡарҙар иреп бөттө. Тик өйҙәрҙең һалам ҡыйыҡтары ғына ҡарҙан әрселгәс, меҫкен ҡиәфәткә инде. Яртылаш ергә һеңгән был өйҙәр халыҡтың күргән нужаһы тураһында һөйләп торалар һымаҡ.** | **10 бал** |
| **4-се һорау** | Редукция дөрөҫ билдәләнгән һүҙгә бер бал<br>**Йомран, йомшаҡ, тупраҡ, тәҙрә** | **4 бал** |
| **5-се һорау** | Дөрөҫ яуапҡа берәр бал<br>1) **Нефть – нефткә**<br>2) **Лагерь – лагерға**<br>3) **Декабрь – декабргә**<br>4) **Жюри –жюриға**<br>5) **Печенье – печеньегә**<br>6) **Власть – власҡа**<br>7) **Октябрский – Октябрскийға**<br>8) **Отпуск – отпускыға** | **8 бал** |

| *Һорауҙың тәртибе* | *Аңлатма* | *Иң юғары иҫәп (бал)* |
|---|---|---|
| **6-сы һорау** | Тура телмәр дөрөҫ яҙылһа – 4 бал, бер бәләкәй кәмселек булһа – 3 бал, 1 хатаға – 2 бал, 2 хатаға – 1 бал<br>**Айгөлдө өләсәһе иртән: “Тор, ҡыҙым, ҡарға бутҡаһына һуңға ҡалабыҙ бит,” – тип уятты.** | **4 бал** |
| **7-се һорау** | Дөрөҫ яуапҡа бер бал<br>**Теләк һөйкәлеше.** | **1 бал** |
| **8-се һорау** | Дөрөҫ яуапҡа берәр бал<br>**Гөлдәр баҡсаһында – М. Ғафурий**<br>**Туғандар һәм таныштар – Ж. Кейекбаев**<br>**Айбикә – Һ. Дәүләтшина**<br>**Оҙон-оҙаҡ бала саҡ – М. Кәрим**<br>**Атай икмәге – Ф. Аҡбулатова** | **5 бал** |
| **9-сы һорау** | Дөрөҫ яуапҡа бер бал<br>**3) ☑ 1923** | **1 бал** |
| **10-сы һорау** | Дөрөҫ яуапҡа бер бал<br>**4) ☑ Ҡасҡындар тураһында** | **1 бал** |
| **11-се һорау** | Шәхесте дөрөҫ билдәһәләр – 3 бал, уның тураһында мәғлүмәттең тулылығына ҡарап, тағы бишкә тиклем бал ҡуйырға мөмкин<br>**Александр Матвеевич МАТРОСОВ – Шәкирйән Юныс улы МӨХӘМӘТЙӘНОВ (1924 – 1943). Советтар Союзы Геройы, хәҙерге Учалы районы Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Балалар йортонда, НКВД ҡарамағындағы хеҙмәт колонияһында тәрбиәләнә. Үҫмер ваҡытында Александр Матросов тигән яңы исем һәм фамилия ала. 1943 йылдың 27 февралендә Псков өлкәһенең Чернушки ауылы өсөн ҡаты һуғышта кәүҙәһе менән дошман амбразураһын ҡаплай. Был батырлығы өсөн Матросовҡа Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.** | **8 бал** |
| **12-се һорау** | Йөкмәткеһе өсөн – 2 бал,<br>уҡыусының телмәре өсөн – 4 бал,<br>грамоталылығы өсөн – 4 бал ҡуйыла. | **10 бал** |
| | **Дөйөм балдарҙың иҫәбе 62-нән артмаҫҡа тейеш.** | **62 бал** |